Солтанов

# Сафта калам



Контрольный листок сроков возврата

КНИГА ДОЛЖНА БЫТЬ
ВОЗВРАЩЕНА НЕ ПОЗЖЕ
УКАЗАННОГО ЗДЕСЬ СРОКА

Колич. пред. выдач ____________

ГУП РБ «Издательство «Белая река», 2007. Заказ 070040. Тираж 50 000.

Хөрмәтле Нур[illegible]

[illegible]

[illegible]

21/II 2006.



84(2Рос=Баш)
С 89 -4Б

**Мостафа СОЛТАНОВ**

султанов

# САФТА ҠАЛАМ

## Шиғырҙар

53369 - 43556 аб

МУНИЦИПАЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ КУЛЬТУРЫ "ЦЕНТРАЛИЗОВАННАЯ БИБЛИОТЕЧНАЯ СИСТЕМА" ГО г. КУМЕРТАУ РБ

Күмертау – 2004

ББК-84(2Рос=Баш)6
С–89

Мостафа С.

Сафта ҡалам: Шиғырҙар. – Күмертау: ҡала нәшриәте, 2004, 114 бит.

Мостафа Солтановтың был тәүге шиғырҙар китабына (быға тиклем ике проза китабы нәшер ителгәйне) тыуған яғын, хеҙмәт кешеләрен данлаған төрлө йылдарҙа яҙылған шиғырҙары индерелде.

ISBN 5-901834-18-6
© Мустафа Султанов, 2004.

# Журналистика ветераны

*(Автор тураһында һүҙ)*

Солтанов Мостафа Кәрим улын мин бынан 40 йылдан ашыу элек – мәктәп йылдарынан уҡ беләмен. Яҡшымбәт урта мәктәбенең 8–10-сы синыфтар уҡыусыһы сағымда район гәзитенә ҙур булмаған мәҡәләләр, үҙемдең тәүге шиғырҙарымды ебәрә инем. Район үҙәгенә барырға тура килгәндә редакцияға кергеләп тә йөрөй башланым һәм журналист Мостафа ағай Солтанов менән таныштым. Беҙҙең ауылға эш буйынса килгәнендә лә осрашабыҙ, ул миңә гәзит биттәрендә мәҡәләләр менән сығыш яһау буйынса аҡыллы һәм дәртләндергес кәңәштәр бирә.

Һуңғараҡ район ауыл хужалығы идаралығында баш белгес булып эшләгәндә Мостафа Кәрим улы менән хужалыҡтарға йыш ҡына

бергә барып йөрөргә тура килде. Ул ауыл кешеләренең ауыр, әммә халыҡ өсөн бик тә кәрәкле хеҙмәте, хужалыҡ алдынғылары тураһында гәзит биттәрендә бик тә мауыҡтырғыс яҙмалары менән сығыш яһаны, һуғыш ветерандарының бөгөнгө тормошон сағылдырған төплө мәҡәләләр яҙҙы.

Мостафа Солтанов Миәкә районы Ҡаран ауылында 1912 йылдың 8-се февралендә урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Ауыл мәктәбендә башланғыс белем ала. 1928 йылда комсомол сафына инә, колхоз ойоштороуҙа әүҙем ҡатнаша, хисапсы-кассир булып эшләй, бригадир вазифаһын башҡара. 1934-1937 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә.

Хәрби хеҙмәтен тултырып ҡайтҡас 1937-1941 йылдарҙа Мостафа Солтанов Әлшәй районы гәзите



редакцияһында хәбәрсе, мөхәррир урынбаҫары булып эшләй. 1941 йылдың 10 июнендә уны яңынан Армия сафына алалар.

Бик оҙон, ауыр һуғыш юлдары үтә Мостафа Кәрим улы, дәһшәтле һуғыш ҡоралы «Катюша»ла орудие командиры була. Солтановтың нисек батырҙарса һуғышыуын, фронттарҙа үҙенең хәрби бурысын намыҫлы һәм ҡыйыу үтәүен уға тапшырылған наградалар – Ҡыҙыл Йондоҙ, III һәм II дәрәжә Дан ордендары, Ватан һуғышы ордены яҡшы раҫлайҙар.

Мостафа ағай һуғыштан 1945 йылдың октябрь аҙағында ғына ҡайта һәм ноябрь баштарында яңынан журналистика эшенә бирелә – уны Әлшәй районы гәзите мөхәррире итеп тәғәйенләйҙәр. 1949-1951 йылдарҙа Өлкә партия мәктәбендә уҡый. Уны уңышлы тамамлағас, 12 йыл республиканың

көньяҡ зонаһы буйынса «Совет Башҡортостаны» гәзитенең үҙ хәбәрсеһе булып эшләй. 1963-1965 йылдарҙа эреләтелгән Мәләүез районы партия комитеты инструкторы вазифаһын башҡара.

Мостафа Кәрим улы 1952 йылдан алып ғаиләһе менән Ермолаево ҡасабаһында йәшәй. 1965 йылда ул саҡтағы берләштерелгән Күмертау ҡалаһы һәм Көйөргәҙе районы «Ильич юлы» гәзите редакцияһына мөхәррир урынбаҫары булып эшкә кергәс Күмертауға күсә һәм 1984 йылға тиклем ошо эшендә эшләй. Унан тағы 6 йыл район музейы директоры булып эшләп, 1990 йылда 87 йәшендә генә хаҡлы ялға китә. Ә ысынбарлыҡта Мостафа Солтанов бөгөнгө көндә лә өйөндә тик ятып сыҙай торған кеше түгел, яҙышыу эшенән туҡтағаны юҡ. Ҡала һәм район гәзиттәре биттәрендә



мәҡәләләре йыш сыға, һирәкләп булһа ла республика матбуғатында ла уның ҡултамғаһы менән материалдар баҫылып тора.

– Журналист булыу хыялы һиндә ҡасан тыуҙы? – тигән һорауға ул быны шуларҙы һөйләне:

– Был хәл 1934 йылдың май айында булды. Тыуған ауылым Ҡаранда яҙғы сәсеү бара, мин – бригадирмын. Сәсеүҙәге тракторҙарға яғыулыҡты аттар менән Аксеново станцияһынан ташыйбыҙ. Икенсе көн инде тракторҙар яғыулыҡһыҙ торалар. Мин киттем Аксеново станцияһына һәм тикшереп шуны белдем: яғыулыҡ ебәреүсе склад мөдире «төшөрөп» йөрөй икән, ә бухгалтерияла, документтарығыҙ дөрөҫ түгел тигән һылтау менән склад мөдирен яҡлашып, яғыулыҡ ебәреүҙе юрамал тотҡарлайҙар. Иртәгәһенә үк мин был турала өлкә матбуғатына тәнҡит мәҡәләһе яҙып

ебәрҙем. Баҫылып сыҡҡас, был мәҡәлә район күләмендә ҙур тауыш күтәрҙе. Өфөнән килеп тикшерҙеләр, ғәйеплеләргә тейешле яза бирелде. Шул саҡта матбуғаттың көсөнә ышаныс тыуҙы миндә, гәзиткә яҙышыуымды дауам иттем. Журналистика серҙәренә төшөнөүҙә миңә өлкә гәзите хәбәрсеһе яҡташым Ғәзиз Абдуллин ҙур ярҙам күрһәтте, күңелемдә яҙышыуға ынтылыш уятты.

Мостафа Кәрим улы Солтанов район, ҡала һәм өлкә гәзиттәрендә батыр яугирҙар, хеҙмәт батырҙары тураһында бик күп очерктар, мәҡәләләр баҫтыра, уларҙы китап итеп сығарыу өсөн бергә туплай башлай. Шулай итеп ул тәүге тапҡыр 1997 йылда Яҡшымбәт ауыл Советы территорияһында урынлашҡан ауылдарҙан Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға арналған «Хәтер китабы»н Күмертау



ҡала типографияһында баҫтырып сығара. 1998 йылда Күмертау ҡалаһының 45 йыллығына арнап сығарылған «Һиндә ҡалам, ғәзиз ҡалам» исемле китапҡа уның ҡаланы төҙөүҙә ҡатнашыусы хеҙмәт алдынғылары тураһындағы яҙмаһы индерелгән.

2000 йылда Мостафа Солтановтың «Утлы юлдар, шанлы йылдар» исемле публицистика, проза һәм поэзия материалдары тупланған ҡалын ғына китабы урындағы типографияла нәшер ителә. Был китап ҙур тарихи әһәмиәткә эйә, сөнки бында Күмертау ҡалаһының, Көйөргәҙе, Күгәрсен, Миәкә райондарының күп кенә күренекле кешеләренең тормош юлдары, уларҙың хеҙмәт һәм һуғыш йылдарындағы батырлыҡтары тураһында күп тарихи материалдар бар.

Етмеш йылға яҡын яҙышыу тәжрибәһе булған журналист,

БАССР-зың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, журналистарҙың Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге республика премияһы лауреаты, Күмертау ҡалаһының Почетлы гражданины Мостафа Кәрим улы Солтановтың «Сафта ҡалам» исемле шиғырҙар китабын ҡулына алған ҡайһы бер уҡыусылар, «Беҙҙең Мостафа бабай журналист ҡына түгел, ә шағир ҙа икән» тигән аптырауҙа ҡалыуҙары бар. Сөнки Мостафа Кәрим улы шиғырҙар яҙыу менән һуңғы йылдарҙа ғына нығлап мауыға башланы. Китап сығарыу шатлығы кисергән авторҙың күңелен төшөрмәҫ өсөн уның шиғырҙарының әҙәби яҡтан яҙылыш сифатына баһа биреп тормайым. Иң дөрөҫ баһаны китапты уҡыусылар бирер. Әммә ихлас күңелдән шуны әйтәһем килә: туҡһандан уткән журналистың ижади эштәр менән янып йәшәүе, китаптар сығарыуы – үҙе бер



батырлыҡ бит. Уның күп шиғырҙары уңышлы яҙылған, уларҙа ярылып ятҡан фекер бар һәм ул фекер уҡыусыға аңлайышлы, ябай телдә әйтелгән. «Башҡорт ғорурлығын һаҡларбыҙ» тигән шиғырында шундай юлдар бар:

*«Башҡортостан – күп милләттәр иле,*
*Әммә үҙ урыныбыҙҙы аңлайыҡ.*
*Тиң йәшәйбеҙ тигән һүҙгә алданып,*
*Аралыҡта ҡыҫылып ҡалмайыҡ».*

Оло тормош тәжрибәһенә эйә булған автор, башҡорт халҡының үтә ябай һәм киң күңеллелеге үҙенә зыян килтермәгәйе, тип хәүефләнә.

Мостафа Солтановтың китабында илебеҙҙе һаҡлап дошман менән аяуһыҙ һуғышҡан батыр яугирҙар тураһындағы шиғырҙары күп урын алған. Мәҫәлән, «Ер-әсәбеҙ һаҡланы» шиғырында:

*«Онотолмай пуля яуған саҡта*
*Ер ҡуйынына һыйынып ятҡаным.*

*Үлем тырнағына бирмәйенсә,*
*Ер-әсәбеҙ беҙҙе һаҡланы»,– тип яҙа ул.*

*Йәки:*

*«Сал сәстәргә ҡарамағыҙ,*
*Аҡыл төҫө – аҡ, тиҙәр бит.*
*Ҡасандыр шул сал сәслеләр*
*Илде ҡотҡарған ирҙәр бит».*

Автор үҙенең ауырлыҡтар алдында юғалып ҡалмауы, уңыштарҙан артыҡ осонмауы тураһында асыҡтан-асыҡ әйтеп һала:

*«Ир-уҙаман булып йәшәнем мин,*
*Кешеләргә асыу тотманым.*
*Түҙҙем ауыр һүҙҙәр ишетһәм дә,*
*Уңыштарҙан күккә османым».*

(«Минең ғүмерем»).

Мостафа Кәрим улының оҙон ғүмер йәшәүенә аптырарлыҡ урын юҡ, ундайҙар ҡалабыҙҙа, бигерәк тә республикабыҙҙа күптәр. Әммә 93-сө йәше барғанда Мостафа ағайҙың



ижади эштәр менән уңышлы шөғөлләнеүе, яҙышыуҙан туҡтамауы бик тә ҡыуанысlы. Журналистика ветераны һаман да сафта. Ул китабына «Сафта ҡалам» тигән исемде юҡҡа ғына ҡуймаған.

Мостафа Кәрим улы Солтановтың тормош юлы, уның ижады менән таныштырыуҙы һүҙҙәремде шиғри юлдар менән тамамларға теләйем:

*Ас бүреләй ярһып ажғырынды*
*Фәмһеҙ ҡыштың әрһеҙ бураны.*
*Аҡ өйөрҙәр аҡ таҫмаһы менән*
*Сорнап алған Ҡаран урамын.*
*Әсе һыҙғырынып февраль еле*
*Тәҙрә ҡапҡастарын зың ҡаға.*
*Шундай тынғыһыҙ бер*
*ҡышҡы төндә*
*Мостафа-сабый тыуа донъяға.*
*Йылдар уҙа тора.*
*Йәш Мостафа*
*Йәшәү хаҡын иртә төшөнә.*
*Йәне-тәне менән бирелә ул*

*Журналистикабыҙ эшенә.*
*Ҡәләм үткерләнә, әммә уны*
*Тура килә ташлап торорға.*
*Кәрәк була туған илде һаҡлап*
*Яуыз дошмандарҙы ҡырырға.*
*Ул еңеүсе даны алып ҡайта*
*Күп ордендар тағып түшенә.*
*Һәм яңынан башы менән сума*
*Күңеленә ятыш эшенә.*
*«Атҡаҙанған» тигән*
*исем менән*
*Баһаланды уның хеҙмәте.*
*Ә шулай ҙа иң ҙур баһа булды*
*Гәзит уҡыусылар рәхмәте.*
*– Кәрим улы, һинең кеүек иргә*
*90 йәш ул әле сик түгел.*
*Һәр саҡ шатлыҡтарға тулы булһын*
*Дуҫтарыңа асҡан саф күңел.*
*Киләсәктә именлектәр булһын*
*Туған илгә, тыуған йорттарға.*
*Насип булһын беҙгә алда тағы*
*Һине 100 йәш менән ҡотларға!*

***Кинйәғәли АБДУЛЛИН,***
***Күмертау яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе.***



## ГҮЗӘЛ ҠАЛАМ – КҮМЕРТАУ

Гүзәл ҡалам – Күмертау,
Һиндә атай, әсәй танышҡан.
Ҡайнар мөхәбәттә янып,
Ғүмерлеккә улар ҡауышҡан.

Шулай улар данлы төҙөлөштә
Яҙмыштарын бергә бәйләгән.
Киләсәккә ике йәш йөрәкте
Яҡты хыял ғына әйҙәгән.

Ҡала үҫкән шанлы йылдарҙа,
Шул саҡ ҡалаға мин килгәнмен.
Шуға ла бит Күмертауымды
Ғүмер буйы өҙөлөп һөйәмен.

Күмертауым минең,данлы ҡалам,
Һиндә хеҙмәт юлы үттем мин,
Дуҫтарымды, бәхетемде табып,
Һиндә рәхәт ғүмер итәм мин.

Йәшлегендә килеп Күмертауға,
Бик яратҡан уны атайым.
Мин үҙ иттем уны мәңгелеккә,
Ул бит минең кесе Ватаным.

## БАШҠОРТТАР –
## ҮҘЕНСӘЛЕКЛЕ ХАЛЫҠ

*“Башҡортостан, Гөлбостан*
*Шунда тыуған, шунда үҫкән*
*Башҡорт атлы арыҫлан!”*

(Шәйехзада Бабич)

Шулай бөйөк шағир баһа биргән
Туған башҡорт халҡына.
Сөнки ул азатлыҡ өсөн көрәштә
Тоғро булған изге антына.

Быуаттар буйы көрәшеп башҡорттар,
Ныҡлы һаҡлап,
һис бирмәгән Уралын.
Бөйөк октябрҙә үҙ дәүләтен төҙөп,
Донъяла тыуҙырған ғәзиз илкәйен.

Рәсәй ғалимдары,
яҙыусылар башҡорттарҙы
Иң көслө, ныҡлы халыҡ тигәндәр.
Сөнки бөйөк Рәсәйҙе
яҡлауҙа башҡорттар
Үҙ көстәрен йәлләмәй биргәндәр.



53369 - 43556

Белһә икән йәш быуындар
Башҡорт яугирҙары күпме
һуғыштарҙа ҡатнашҡан:
Фин, Швед, Пруссия, Төрөк...
Аҙаҡ килеп октябрь үҙәге –
Петроградты һаҡлаған.

Башҡорт халҡы тыныс тормошта ла
Үҙенең батыр ир-уҙаманлығын
күрһәтә.
Республикала төрлө милләт
татыу йәшәй,
Шуға ла Башҡортостан дуҫлыҡ иле
тип әйтелә.

## БАШҠОРТ
## ҒОРУРЛЫҒЫН ҺАҠЛАРБЫҘ

Башҡортостан – күп милләттәр иле,
Әммә үҙ урыныбыҙҙы аңлайыҡ.
Тиң йәшәйбеҙ тигән һүҙгә алданып,
Аралыҡта ҡыҫылып ҡалмайыҡ.



Городская ЦБ
г. Кумертау

Әйткәндәр бит, урыҫҡа дуҫ булһаң,
Балтаң булһын, тиеп биленд͡ә.
Хәҙер үтте балта заманаһы,
Эйә булыу кәрәк белемгә.

Сәсән Аҡмулла ла оран һалған:
«Башҡорттарым, уҡыу кәрәк,
белем кәрәк».
Алға ышаныслы юл ярғанда
Ғилем булыр беҙгә ҙур терәк.

Күп милләттәр менән тигеҙ йәшәп,
һәр саҡ алғы сафта атларбыҙ.
Тик аҡылға ғына таянып беҙ
Башҡорт ғорурлығын һаҡларбыҙ.

## ПРЕЗИДЕНТЫБЫҘ РӘХИМОВҠА
*(Башҡортостан батшаһына мәдхиә)*

Белем, ғилемгә һыуһап һин
Күтәрелдең төпкөл ауылдан.
Үҙ юлыңда баҙыҡ атланың,
Бирешмәнең елгә, дауылға.



Аҡыл-арғымаҡҡа атланып һин
Менә алдың бейек сағылға,
Турылыҡлы, ғәҙел булдың,
Таянып эш ҡылдың зиһен, аҡылға.

Үҙ иттең бөтә милләттәрҙе,
Башҡорт күңеле шулай киң бит ул.
Башҡортостанды дуҫлыҡ иле иттең -
Бөйөк ҡаҙанышҡа тиң бит ул.

Ҡыйыу, батыр булдың эшеңдә гел,
Хәҡиҡәтте көслө яҡланың,
Ауыл эшсәндәре бәхете өсөн
Колхоздарҙы ярай һаҡланың.

Рәхимов – рәхмәтле тигән һүҙ,
Исемеңә тура килә есемең.
Халҡыбыҙға һәйбәт
йәшәү булдырырлыҡ
Бар икән ҡөҙрәт, көсөң.

Халыҡтар өсөн бөйөк эшең
Ишетелде бит бөтә донъяға.
Һинең кеүек гениаль аҡыл эйәһе
Быуатҡа бер тыуа донъяла.

# БАШҠОРТ – ҒОРУР ХАЛЫҠ

*(БР-ның үҙаллылығына ете йыл тулыу байрамына арнап)*

Белһен ине йәш быуындар шуны:
Ауылдарҙың нисек янғанын.
Карателдәр үткән төбәктәрҙә
Ҡола ялан тороп ҡалғанын.

Әммә ләкин башҡорт бирешмәгән,
Күтәрелгән тағы көрәшкә,
Ере, һыуы ҙур Уралы өсөн
Нәфрәт уты тулған йөрәккә.

Ҡалтыранған батша властары
Салауаттар сыҡһа майҙанға,
Башҡорт батырҙарының дандары
Мәғлүм булған бөтә донъяға.

Тарих дауам итә, ҙур ҡыуаныс -
Бөгөн байрам башҡорт илендә.
Үҙ дәүләтен төҙөп, башҡорт халҡы
Ғорур йәшәй йомарт ерендә.



# МИНЕҢ ҒҮМЕРЕМ

Оҙон ғүмер - батырлыҡ ул, тиҙәр,
Күп йыл яугир бурысын үтәнем.
Туҡһанымды үтеп йәшәһәм дә,
Мин үҙемде батыр, тимәнем.

Ил яҙмышы өсөн барған һуғыш
Усағында сынығып өлгөрҙөм,
«Катюша»нан көслө залп биреп,
Еңеүгә үҙ өлөшөм индерҙем.

Тыныс тормошта ла алғы сафта
Ғүмерем үтте гәзит эшендә.
Хеҙмәт батырҙарын данланым мин,
Хат та улар керҙе төшөмә.

Минең йәшәү девизым булды
Кешеләргә яҡшылыҡ эшләүҙә,
Шул эшемдән миңә ҡыуаныс.,
Бәхет, зауыҡ ғүмер итеүҙә.

Ир-уҙаман булып йәшәнем мин,
Кешеләргә асыу тотманым,

Түҙҙем ауыр һүҙҙәр ишетһәм дә,
Уңыштарҙан күккә османым.

Асыуланып эш итеү - яман кәңәш,
Сөнки ул тағы ла асыу ҡуптара.
Асыуланыу, талашыуҙан ни файҙа?
Шул хаҡта ныҡ уйлап ҡара!

Хәрәкәттә-бәрәкәт ул, кәрәк
Хәләл көсөң биреп эшләргә.
Донъя шундай матур, киң һәм яҡты,
Ҡәҙерен белеп кенә йәшәргә.

## НЫҠ БУЛАЙЫҠ!

Ышанмағыҙ: ғүмер көҙө
Етте инде тигәндәргә,
Ҡояш байый, көнөгөҙ ҙә
Үтте инде тигәндәргә.

Ҡаплаһа ла тәрән һырҙар
Йыйырсыҡлы маңлайҙарҙы,
Күңелебеҙ йәш тигәнде
Бөгөнгөләр аңлайҙармы?



Беҙҙең быуын утты-һыуҙы
Ҡорбан бирел үтеп сыҡты.
Емереклектәрҙе төҙәттек,
Бар иттек беҙ хатта юҡты.

Сал сәстәргә ҡарамағыҙ –
Аҡыл төҫө – аҡ тиҙәр бит.
Ҡасандыр шул сал сәсләләр
Илде ҡотҡарған ирҙәр бит.

Намыҫ менән ғүмер иткән
Беҙҙең быуын әһелдәре.
Ил яҙмышын хәл итеүҙә
Берҙәм улар һаман әле...

Ғорурлыҡ менән йөрөйбөҙ –
Саф беҙҙең намыҫыбыҙ.
Өлкәнәйһәк тә үҙебеҙ,
Һаман сафта ҡалабыҙ:

Сал сәсле замандаштарым,
Оҙон ғүмер булһын юлдаш.
Әүҙемлекте юғалтмайыҡ,
Ныҡ булайыҡ әле, ҡорҙаш!

## ҠАҺАРМАН АУЫЛДАШЫМ
(Шәүәли Ибраһимовҡа)

Дауыллы инҡилап көндәрендә
Һин булдың ҡыҙыу көрәш эсендә.
Ялҡынлы йәш ғүмереңде арнаның
Башҡорт дәүләте төҙөү эшенә.

Данлы көрәш юлыңды һин
Ҡыҙыл ғәскәр сафында башланың
5-се армия командиры һине
Разведчик итеп дошман
тылына ташланы.

Дәһшәтле һуғыш барған фронтта
Ҡурҡыуһыҙ разведчик булдың һин.
Һалдаттарға дәртле өндәү таратып,
Үлем ҡурҡынысы һынауын
үттең һин.

Алданған яугирҙарға
дөрөҫлөктө әйтеп,
Оло хәрби бурыс атҡарҙың.
Шулай итеп яҡташ һалдаттарҙы
Алдыҡ әсирлегенән ҡотҡарҙың.



## ТАБИБӘ МӨНИРӘГӘ!

Бала саҡтан еңмеш инең,
Өлгөр булдың бар эшеңдә.
Эш һөйгәнлек, оҫталыҡта
Өлгө булдың дуҫ-ишеңә.

Алдын инең уҡыуыңда,
Уҡытыусыңды тыңланың.
Алыҫҡа йөрөп уҡының,
Бурандан ҡурҡып торманың.

Был сифаттар киләлер ул
Атаң-әсәң ҡанынан,
Замандаштары алдында
Улар ҙа бит дан булған.

Таймаҫ мәктәбендә ҡыҙыл
Дипломға лайыҡ булдың,
Тырышлығың менән ҙур ВУЗ
Талибы була алдың.

Ҡыуанысла көн дә етте:
Табип дипломы ҡулыңда,

Яңы өмөт-хыял менән
Баҫтың хеҙмәт юлына.

Гиппократ антына тоғро булдың,
Кешеләрҙе ихлас яраттың,
Бик тә оҫта дауалауың менән
Бар инсанды үҙеңә ҡараттың.

Табиптарҙың оло табибы һин,
Әҙер торҙоң һәр саҡ ярҙамға.
Һинең кеүек тәжрибәле табип
Бик тә кәрәк ошо заманда.

Һәр аҡыллы һүҙең, кәңәшең дә
Ауырыуҙарға шифалы дауа.
Шуға ла халҡыңдан һиңә
Мең-мең рәхмәттәр яуа.



## КҮМЕРТАУ ҺАНДУҒАСЫ

*(БР-ның атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Зыя Хәлиловҡа)*

Тәбиғәттән ине һиндә талант,
Йыр-моңдарҙы янып яраттың,
Күңелдәрҙе арбар моңоң менән
Тамашасыны үҙеңә ҡараттың.

Халыҡ йырҙарын яратып өйрәнеп,
Еткерәһең уны халыҡҡа.
Данлы йырҙарыбыҙ, көйҙәребеҙ
Мәңге яңғыраһын тарихта.

Быуаттарҙан килгән йырҙарыбыҙ
Башҡорт халҡының бөйөк киссаһы.
Күкрәгеңдән урғып, ҡайнап сыға
Ата-бабаларҙың данлы мираҫы.

Ҡалабыҙҙың бик күп йәштәрен дә
Йүнәлттең һин сәнғәт юлына.
Салауатың йырсы, ҡурайсы -
Бар талантың күскән улыңа.

Күңелдәрҙе дәртле моңға күмеп
Йырлап йәшә, Күмертау һандуғасы.
Хоҙай һиңә оҙон ғүмер бирһен -
Һикһән,туҡһан, йөҙгә тулғансы.

## ИМАМ-МӨХТӘСИП САЛАУАТҠА

Тәүге хеҙмәт – тимер эшендә,
Салауат, шәп сынығыу алдың,
Бәләкәйҙән етеҙ малайға
Тимер эше бик оҡшап ҡалды.

Техник училище цехында
Токарь һөнәрен бирелеп яраттың.
Отҡорлоғоң, оҫталығың менән
Бөтә училищены үҙеңә ҡараттың.

Һөнәр буйынса ярыштарҙа
Салауатҡа тиңдәш булманы.
Токарҙарҙың республика ярышында
Күмертау егете беренсе
урынды алды.



Был уңышлыҡ йәш һөнәрсе өсөн
Беренсе бейеклек була.
Егет ҡорона еткәс уға
Тағы бер бейеклек –
илгә хеҙмәте тора.

Һынатманы егет бында ла,
Батыр хеҙмәт итте Ватанға.
Изге бурысына тоғролоҡ өсөн
Лайыҡ булды һәр саҡ маҡтауға.
Ә был икенсе бейеклек Салауатҡа.

Тыныс тормошта ла ул изгелектә:
Илгә, халыҡҡа хеҙмәт итергә,
Бөтә ғөмерен дингә биреп,
Олатайҙары вариҫын тоғро үтәргә.

Ә бына был бурыс Салауат өсөн
Тағы ла бер оло бейеклек.
Үҙ алдына ҡөрьәнде аңлау өсөн
Уға кәрәк булды үтә түҙемлек.

Дин-исламға мөкиббәнлеге өсөн
Салауат булды хөрмәтле хәҙрәт.
Мосолман йолаларын ихлас итеп
Беҙ, бәндәләр, әйтербеҙ уға рәхмәт.

## ЯҢҒЫҘ ҠАТЫНҒА!

*"Инде ни хал итәһең яҙмышың шулай булғас,*
*Пар күгәрсенләр кеүек йәшәгән ғүмерҙәр уҙғас".*
(Халыҡ мәҡәле).

Түбән ҡарап шөкөр ит,
Үргә ҡарап фекер ит:
Әле һин иҫән-һау,
Торорға урының бар,
Ашарға ашың бар.

Яңғыҙлыҡҡа бирешмә,
Дуҫтарыңды юғалтма.
Төшөнкөлөккә бирелмә,
Кешеләргә ярҙамсыл бул,
Хәйер биреүҙе онотма!

Йыр-моң менән йәшә,
Өйөңдә «Юлдаш»ың булһын.
Уның күңелле моңдары
Һәр саҡ һиңә йәм биреп торһон.

Уның матур алҡыштарын
Ярата бит һәр кеше.
«Юлдаш» каналы тапшырыуҙары -
Башҡорт йомартлығы емеше.



## ЗАЛП

Һуғыш аллаһы туғаны «Катюша»
Фронттарҙа дәһшәтле урын дауланы.
Фашист-дошмандарға
емергес удар биреп,
Совет ҡораллы көсөн данланы.

Мин һуғышта гвардеец һәм дә
«Катюша» командиры булдым.
Кавказ тауҙарын яҡлап,
дошмандарға
Утлы ракеталар осорҙом.

42 йыл, август, хәтеремдә:
Полк менән залп бирҙек,
Дошмандар өҫтөнә бер ҡатарҙан
380 утлы ракета осорҙоҡ.

Беҙ, гвардеецтар, Кавказ тауҙарынан
Берлингәсә утлы юл үттек.
Ошо юлдарҙа күп залптар биреп,
Бихисап дошмандарҙы юҡ иттек.

Фашистар өңө Берлингә барып етеп,
Беҙҙең һуңғы залп яңғыраны.
Бөйөк Еңеү салютын биреп,
«Катюша»
Совет иле көсөн данланы.

## ОЛОЛАРҒА ДАН, ИХТИРАМ

Бирешмәйсә заман елдәренә,
Күпте йәшәп, күпте күрҙегеҙ.
Тормош баҫҡыстарын намыҫығыҙға
Тоғролоҡло булып үттегеҙ.

Ғәрәсәтле йылдар тура килде,
Күп булдығыҙ утлы юлдарҙа.
Һөжүмдәргә ҡыйыу керҙегеҙ һеҙ
Автоматтар тотоп ҡулдарға.

Һуғыштан һуң һеҙгә тағы тура
Килде аслы-туҡлы йәшәргә,
Барына ла түҙеп, сер бирмәйсә,
Ваҡыт һанамайса эшләргә.



Ир-уҙаман булып йәшәнегеҙ,
Үҫтерҙегеҙ зирәк балалар.
Улар нәҫел-ырыуыбыҙҙы дауам
Иттереүсе булып ҡалалар.

Оҙон ғүмер – йәшәү өлгөһө һәм
Матурлыҡҡа тиң ул, тигәндәр.
Шуға оло йәштәгеләр Көнөн
Оло байрам көнө иткәндәр.

Әйтһәләр ҙә маймыл нәҫеле тип,
Әл дә аңлы кеше булғанбыҙ.
Бер-беребеҙгә терәк булып йәшәү
Өсөн донъяға бит тыуғанбыҙ.

Замандаштар, йәшәү серен әйтәм,
Мәғлүм булһын һеҙгә был хиҡиҡәт:
Оҙон ғүмерҙең бит нигеҙ ташы –
Изге күңел һәм оло хеҙмәт.

## ЗАРЛАНМАЙБЫҘ ЯҘМЫШҠА

Егет ҡорона ла етер-етмәҫ
Баҫтым хәрби хеҙмәт сафына.
Хәтәр утлы юлдар үткәндә лә
Һәр саҡ тоғро ҡалдым антыма.

Фронт юлдарын үттек көрәш менән,
Окоптарҙа боҫоп ятманыҡ.
Туған еребеҙҙе азат итеп,
Көнбайышҡа ҡыйыу атланыҡ.

Яраландым, тағы сафҡа баҫтым,
Үҙ ояһына яптыҡ дошманды.
Дөмөктөрөп яуыз фашистарҙы,
Үтәнек беҙ Ватан ҡушҡанды.

Йәшәйек, яуҙаш дуҫтар,
шатланышып,
Үҙебеҙ яулап алған тормошта.
Ауыр көндәр инде артта ҡалды,
Зарланмайбыҙ һис тә яҙмышҡа.



## ЕР-ӘСӘБЕҘ ҺАҠЛАНЫ

Ил яҙмышы хәл ителгән йылдар
Күңелемдән китмәй һаҡлана.
Ғәрәсәтле һуғыш онотолмай,
Ярты быуат артта ҡалһа ла.

Онотолмай пуля яуған саҡта
Ер ҡуйынына һыйынып ятҡаным.
Үлем тырнағына бирмәйенсә
Ер-әсәбеҙ беҙҙе һаҡланы.

Өшөһәк тә Ергә һыйындыҡ беҙ,
Унын менән булдыҡ ырыҫлы.
Бөгөн йәшәүебеҙ менән дә бит
Ер-әсәбеҙгә беҙ бурыслы.

Һөжүмдәргә барҙыҡ ҡурҡыу белмәй,
Гел еңеүгә, алға атланыҡ.
Тешен ҡайрап үлем килгәндә лә,
Ер-әсәбеҙ беҙҙе һаҡланы.

Яугир дуҫтар, тыныс тормошта ла,
Рухи өлгө булып йәштәргә,
Ер-әсәбеҙ беҙҙе һаҡлағанда,
Йәшәргә лә әле йәшәргә.

## ПОЛКТАШЫМ ХАТЫ

“Сәләм-тәбрик һиңә ебәрәмен
Йәшлек йылдар килгән яҡтарҙан.
Дуҫлығыбыҙ тимерҙәй сыныҡты
Һуғыш уты дөрләр саҡтарҙа.

Окопташым минең, хәтереңдәме,
Бер котелоктан беҙ ашаныҡ.!?
Ҡайсаҡ котелокта аштар ҡалды...
Ҡанлы атакаға ташландыҡ.

Ышаныслы була утта яныпп,
Ҡан ҡушылған һалдат дуҫлығы.
Үлемесле фронт юлдарында
Иҫбатланды унын ныҡлығы.

Кавказ, Кубань, Ҡырым ерҙәрендә
Яуҙаш дуҫлығыбыҙ башланды.
Оҙон юлдар үтеп, Еңеү яулап,
Үтәнек беҙ Ватан ҡушҡанды.

Яу юлдары үттек, һыуҙар кистек,
Ҡандар ҡойоп, Еңеү яуланыҡ.
Күптәребеҙҙе һаҡлай алмаһаҡ та,
Тыуған илебеҙҙе һаҡланыҡ”.



## ТУҒАНЫМ-ҠОРАЛДАШЫМ

Һағынам да ҡайтам ауылыма
Ауылдаштарымды күрергә,
Баласағым һуҡмаҡтары буйлап
Әрхәнәкәй тауға менергә.

Тауҙың битлегендә күпме йылдар
Күпме серле һуҡмаҡ ярылған.
Мәрмәр стенаһын семәрләтеп
Фронтовиктар исеме яҙылған.

Фронтовиктар... Ғәзиз Ватан өсөн,
Тормош өсөн ҡорбан булғандар.
Именлекте һаҡлауҙы иҫкәртеп,
Исемдәре генә ҡалғандар.

Минең бик күп ауылдаштарым да
Төрлө фронттарҙа ҡатнашҡан.
Шулар менән
Марҙан ҡарындашым да
Дошмандарға ҡаршы һуғышҡан.

Һуғыш аллаһы «Катюша» ла
Марҙан
Булған ҡурҡыу белмәҫ водитель.
Бер үк алышта беҙ ҡатнашҡанбыҙ –
Осраҡлы хәлдәр була бит ул.

Беҙҙең 50-се ГМП һөжүм
Итте Сапун тауы аҫтынан.
88-се полк гвардеецтары
Удар бирҙе «Сиваиши» яғынан.

Шулай итеп Марҙан туған менән
Бер фронтта хеҙмәт иткәнбеҙ.
Фашистарҙы тар-мар итергә
Бергә көслө залп биргәнбеҙ.



## САФТА ҠАЛАМ

Яҙмышымдан ҡәнәғәтмен мин –
Әлдә һаулыҡ биргән Хоҙайым.
Йәшәү өсөн тыуғас был донъяға,
Теүәл булһын икән иманың.



Ауыр саҡтар бик күп була, әммә
Кәрәк кеше булып йәшәргә,
Ғүмерең буйы намыҫыңды һаҡлап,
Кешеләргә изгелек эшләргә.

Совет заманы кешеләре булдыҡ,
Патриотик рухта үҫтек беҙ,
Милләттәр берҙәмлегендә йәшәнек,
Утҡа, һыуға берҙәм керҙек беҙ.

Тыныс тормошта ла ғүмер иттем
Алғы сафта гәзит эшендә.
Дан йырланым яуҙаштарыма мин,
Хеҙмәт иттем улар өсөн дә.

Кешеләргә яҡшылыҡ эшләүҙе
Оло бәхет итеп һананым.
Туҡһанымды үткән сағымда ла,
Журналистар сафында ҡаламын.

## ЯҢЫ МИҘАЛ

Күкрәгемдә – яңы миҙал,
«Фронтовик» тип яҙылған.

Был бүләккә тәрән мәғәнә, –
Ил рәхмәте һалынған.

Бөгөнгө тыныс тормошто
Ҡорал тотоп яуланыҡ,
Беҙҙең быуын алыштарҙа
Батыр булып дан алды.

Был миҙалда яуҙаштарҙың
Йәш йөҙҙәре сағыла.
Ветерандар сафтарында
Көслө моңдар ағыла.



## ДИМ БУЙЫ ЕГЕТЕ

*(Яҡташым Рафиҡ Сыртланов иҫтәлегенә)*

Бала саҡтан үтә тырыш булдың,
Белем, ғилем өсөн алҡындың.
Күтәрелеп мәғариф күгенә,
Яҡты йондоҙ булып балҡының.



Яҡты аҡыл, киң күңелең менән
Ихлас яраттың бар кешене.
Хеҙмәтеңде күрҙе халҡың, юғары
Баһаланы изге эшеңде.

Атҡаҙанған уҡытыусы булдың,
Журналистиканы яраттың.
Гәзиттәрҙәге сығыштарың менән
Кешеләрҙе үҙеңә ҡараттың.

Тыуып үҫһәң дә һин Дим буйында,
Ғүмерең үтте дала яғында.
Йөрәк ялҡының бирҙең
йәш быуынға,
Даның ҡалды Мораптал ауылында.

## ҺАЛДАТ ҺАҒЫШЫ

Һалдат булдым – иңдә погон,
Өҫтөмдә – һоро шинель.
Ил һаҡлау тигән бурысты
Үтәүе еңел түгел.

Ҡарауылы, вахтаһы ла,
Йүгереү, атышыу ҙа,
Буш сағында хат та яҙыу –
Беҙҙең көн шулай уҙа.

Киске отбой. Йоҡо алмай.
Күҙ алдымда – ауылым.
Атай, әсәй, туғандарым –
Һеҙҙе шундай һағындым!

Ауылымдың туғайҙары,
Этем, һыйыр, беҙҙең ат,
Түбән оста үсеп килгән
Сәскәләй матур ҡыҙ Гөлшат –

Бөтәгеҙ ҙә күҙ алдымда,
Һағынам шундай һеҙҙе.
Ашҡынып көтәм үтеүен
Тағы бер генә көҙҙөң.



Ә яҙ еткәс, ҡоштар менән
Ҡайтып инермен өйгә.
...Әлегә хыялға сумып,
Йоҡоға китәм генә...



# ҠЫУАНАМ

Һәр иртә мин саф һауаға,
Яҡты көнгә ҡыуанам.
Шатлыҡ хистәре өҫтәлә,
Тыныс булғас бар донъям.

Урмандарҙы урап ҡайтам,
Ҡар яуғанға шөкөр, тим.
Йәштәштәрем, ырыуҙаштар
Менән бергә йөрөйөм.

Ғүмеремдең күп өлөшөн
Үткәргән ҡалам барға,
Йома һайын никахлашҡан
Бәхетле йәш парҙарға,

Ауаз һалған сабыйҙарға
Бәхетем ташып ҡыуанам.
Шөкөр, илемдә рәхәт, тип,
Иркен һулап тын алам.

## ТАМАРА РӘШИТ ҠЫҘЫНА

Сурағол тау итәгендә
Тәү ҡат саңғыға баҫтың.
Ярһыу йөрәк хистәренде
Һалҡын шишмә һыуы баҫты.

Үрге Мотал тәбиғәте
Биргән матурлығың менән
Бейеклектән-бейеклеккә
Күтәрелә барҙың гелән.

Маяҡта ла маяҡ булдың:
Уҡының гел «дүрткә»-«бишкә».
Бала саҡтан ижад һөйҙөң,
Тоғро ҡалдың ошо эшкә.

Әҙ булманы нурлағаның
Башҡортостан сәсәндәрен.
Радио аша таратаһың
Илдең һуңғы хәбәрҙәрен.

Аҡ юл һиңә киләсәккә,
Ғорурланып алға ҡара.
Ҡыуандырып туған халҡыңды,
Оҙаҡ йәшә һин, Тамара!



## БАШҠОРТ ЙЫРЫ

Башҡорт йыры, ҡурай моңо –
Айырылмаҫ юлдаштар.
Борондан халҡыбыҙ булған
Шат йыр менән эш башлар.

Халыҡ йырын тыңлағанда
Уй-хистәргә батаһың.
Йыр-моң менән әйтеп бирә
Халҡым үҙенең баһаһын.

Тыныс саҡта йыуатыусы,
Дуҫ ул һуғыш ҡырында,
Башҡорт йыры яңғыраған
Париж, Берлин, Ҡырымда.

Йырҙарҙа – халҡым тарихы,
Үткән ауыр осорҙар.
Һағынһа ла, һөйөнһә лә
Беҙҙең халыҡ йыр һуҙар.

Моңло халыҡ йырҙарын һис
Онотмаҫ килер быуын.
Рухыбыҙҙы күтәрһен йыр –
Күңелгә шатлыҡ тулыр.

## ӨМӨТ

Йәлләмәгән Хоҙай беҙҙән
Ныҡышмалылыҡ хисен,
Өмөт тигән ышанысты
Өҫтәп тырышлыҡ өсөн.

Өмөтһеҙ – шайтан, тигәндәр,
Өмөтһеҙ бит йәшәү юҡ.
Өмөтләнөнөң көнө уңған,
Өмөт булһа, тамаҡ туҡ.

Өмөт йөрөтә әҙәмде
Ризыҡ биреп өгөтләп.
Ҡартайғас та һис һүрелмәй
Күңелдәге өмөттәр.

Тырыш хеҙмәт менән өмөт
Ысынға аша бара.
Изгелеккә өмөт итеп,
Ғүмер – юл атлап барам.



## КҮМЕРТАУЫМ – ҒҮМЕР БИШЕГЕМ

Уралымдың көньяҡ бер һыҙаты –
Дала сиген бер тау ҡаплаған.
Меңәр йылдар шул тау ҡуйынында
Йылы бирер күмер һаҡланған.

Ауыр саҡта илгә ул күкрәген
Киң айырып асып күрһәтте:
Йылдар хазинаһы – һоро күмер
Эшселәрҙе эштә гөрләтте.

Ер ҡуйынынан илгә байлыҡ бирер
Күмер ҡаҙҙы уңған кешеләр.
Рекордтар ҙа булды, хайран ҡалды
Бар илебеҙ улар эшенә.

Уңған ҡулдар булғас эш тә барҙы,
Үҫеп сыҡты күркәм бер ҡала.
Мәңгелеккә данлап тау хеҙмәтен,
Ул Күмертау тиеп атала.

Ярты быуат ҡына йәшәһә лә,
Күмертауҙы күптәр беләләр.

Иңләп осоп бөтә ҡитғаларҙы,
Осҡостары күкте теләләр.

Булдыҡлы ла, аҡыллы ла халҡы –
Эшһөйәр һәм уңған кешеләр.
Мөләйем һәм үтә яғымлылыр –
Бик һирәктәр уның ишеләр.

Күмертауым – ғүмер бишегем,
Һәр саҡ иркен асыҡ ишегең.
Ил хәстәре менән янаһың да
Алға табан киң юл яраһың.

Данлап йырлайымсы үҙ ҡаламды, –
Күмертауҙа үтте ғүмерем.
Йәшәүгә көс, йәнгә йылы бирҙе
Күмертауҙың һоро күмере.

## РӘЙСӘ РӘХМӘТ ҠЫҘЫНА

Ғүмерең буйы мәғрифәттә эшләп,
Йәш быуынға белем бирҙең һин.
Кешеләргә рухи көс-дәрт сәсеп,
Бәхетеңде шунда күрҙең һин.



Бөгөн дә бит тынғыһыҙ йөрәгең
Башҡортостан, халҡым, тип яна.
Бушҡа түгел көсөң, хеҙмәтеңә
Бөтә ҡала халҡы шатлана.

Үҙ халҡыңа хеҙмәт итеүҙән һин
Йәшәүеңә илһам алаһың.
Изге эшең һөҙөмтәһен күреп,
Үҙеңә бер зауыҡ табаһың.

Һыҙлаған да аяҡтарың менән
Әллә күпме юлдар үтәһең.
Кешеләргә изгелек эшеңде
Арымай-талмай дауам итәһең.

Халҡың өсөн булған хәрәкәтең
Үҙ һаулығыңа ла ҙур дауа.
Изге хеҙмәт өсөн, Рәхмәт ҡыҙы,
Һиңә мең-мең рәхмәттәр яуа.



## ТАБИП ГЕННАДИЙ БАБИКОВҠА

Атайыңды яҡшы беләм инем:
Йәштән аң-белемгә ынтылды.
Типография асып, беҙҙә тәүге
Гәзит сығарыусы ул булды.

Ә гәзит бит шанлы ул йылдарҙа –
Агитатор, аңға әйҙәүсе,
Тормош яңылығын белдереүсе,
Кешеләргә көс-дәрт биреүсе.

Һин дә эҙләмәнең еңел юлды,
Йәнеңә ятыр һөнәр һайланың.
Хыялың - ауырыуҙар дауалау ине,
Ғүмереңде шуға арнаның.

Бик күп өлкәләргә билдәле бит
Һин етәкселек иткән дауахана.
Күптәр ярҙам һорап һиңә килә
Һаулығына була ҡалһа хана.



Бар табиптар һеҙҙә көләс йөҙлө,
Дауахана бөтә яҡтан данлы.
Гелән генә ҡалығыҙ һеҙ шулай,
Булып аҡ намыҫлы, таҙа ҡанлы.

## АТАЙ ҺӘМ УЛ

Асфальт юлдан икәү атлап килә,
Берҙәй баҫып, берҙәй тиң атлап.
Ишәй менән ҡушай кеүек улар –
Аҙымдары килә бигерәк тап.

Уларҙың береһе – йөҙө янып
Торған һоҡланырлыҡ йәш егет.
Икенсеһенең биттәре йыйырсыҡлы,
Ҡулбаштары төшкәндәр ебеп.

Йөҙҙәренә баҡһаң, йөрәк әрней –
Күҙҙәр мәңгелеккә йомолған:
Бөркөттөкө кеүек ут-күҙҙәрен
Уҙған яу ҡырында ҡалдырған.

Атай ҡәҙерен белгән ғәзиз улы
Ташламаған батыр һалдатты.

Санаторийға алып килеп, уны
Бөтә ергә йөрөтә оҙатып.

Һуҡыр атаһын етәкләгән улға
Һоҡланып та ҡарап торҙом мин.
Ата балаһының изгелеген
Шунда йөрәгемдән тойҙом мин.

*Янғантау, 1987 йыл, август.*

## ШАҒИРӘ – ЗӨБӘРЖӘТКӘ

Бер саҡ шиғырыңда үҙеңде һин
Нәби малайы тип атаның.
Йәшлек дәртең, һүнмәҫ илһам менән
Шиғри арғымаҡҡа атландың.

Ижад бөрөләрең – шиғырҙарың
Гәзиттәрҙә бик йыш баҫыла.
Шиғриәткә ғашиҡлығың менән
Талант көсөң йылдам асыла.

Донъяға һин үҙең генә белгән
Шағир күҙлегенән ҡараның.



Йылдар үтте, ижад үҫә барҙы,
Йәш шағирә тигән дан алдың.

Йәш әҙиптәр күберәк булһындар тип
Бик күп эшләнең һин, Зөбәржәт.
Таланттарҙы табыу, дәртләндереү
Хеҙмәте бит тора бик ҡиммәт.

Оло маҡсатыңды алға ҡуйып,
Ҡайтып еттең тыуған яғыңа.
Ҡыйыу эш башланың илһамланып,
Ижад дуҫтарың йыйҙың янына.

Көндән-көнгә артты йәш шағирҙар,
Үҫә барҙы ижад емешең.
Йәш авторҙар китап сығарҙылар –
Был бит ойошманың уңышы.

Бөгөн Күмертауҙа оло байрам -
Яңы китап күркәм туйлайбыҙ,
Ҙур йөрәкле кеше – Зөбәржәткә
Ысын хөрмәт гимнын йырлайбыҙ.



## ҠАНАТЛЫ ХЫЯЛДАР

Ут-хыялдар әҙәм балаһында
Уҡыу йылдарында башлана.
Ҡанат бирә уға шул хыялдар,
Аҡыл арғымаҡҡа атлана.

Изге хыял ҡанатландыра ла
Белем үрҙәренә күтәрә.
Илебеҙҙең именлеге өсөн
Төрлө батырлыҡҡа этәрә.

Хоҙай биргән беҙгә дәрт һәм дарман
Арымай-талмай тырышып эшләргә,
Аҡылыбыҙҙы аҡ арғымаҡ итеп,
Изге хыял менән йәшәргә.

Башҡараһы эштәр әле бик күп,
Беләктәрең генә талмаһын.
Уйҙарың һәм матур ниәттәрең
Буш хыялдар булып ҡалмаһын.





## ВЕТЕРАНДАР САФТАРҘА

*(Еңеү байрамына арнап)*

Бөгөн ғорур атлай ветерандар,
Уйҙарында – утлы походтар.
Дәррәү тәбрикләйҙәр, гөрләп тора
Улар хөрмәтенә алҡыштар.

Бөгөн ҡыуаныс та, яманһыу ҙа –
Сафтарыбыҙ байтаҡ әҙәйгән.
Эйе, тормош үҙенекен итә,
Яҙмышыбыҙ шуға бәйләнгән.

Ер һелкетеп барған батыр танкист,
Пехотасы – йәйәү атлаған.
Уттар үтеп, Еңеү яулап, улар
Берлин урамдарын тапаған.

Беҙ бөгөн дә шуға бик ғорурбыҙ:
Батыр ҡурсаланыҡ Ватанды.
Яугир бурысын үтәп, ояһында
Дөмөктөрҙөк яуыз дошманды.

Үкенмәйек әле яҙмыштарға,
Ғүмеребеҙ үтте тоғролоҡта.
Беҙҙән өлгө алған йәш быуындар
Һис бер ҡасан ҡалмаҫ хурлыҡҡа.



## ӨЛКӘН ЙӘШТӘГЕЛӘР КӨНӨ

Килеп етте ҡартлыҡ – ғүмер көҙө,
Һис тә уға күңел ышанмай.
Былдай матур йәшәү көҙөнә бит,
Аяныслы, күптәр етә алмай.

Кеше булып бик йәшәйһе килә,
Әҙәм булып тыуғас донъяға.
Ынтылаһың күпте башҡарырға,
Ғүмер-йылға шундай тиҙ аға.

Беҙҙең өлкән быуын кешеләре
Яуҙар сапты илде ҡурсалап.
Ил яҙмышын хәл итеүгә ул саҡ
Ҡуйылғайны бигерәк ҙур талап.



Ғүмер көҙө етте, болоҡһотоп
«Һары япраҡ» шаулап ҡойола.
Күңел һаман йәшәү өмөтөндә,
Ҡышҡа әле алыҫ тойола.

## ТӘБИҒӘТКӘ ҮПКӘЛӘМӘЙЕК!

*"Урай ҙа ғына урай ҡарҙар яуһа,*
*Бойоҡмаймы болан балаһы.*
*Бер-ике лә нужа күрмәйенсә*
*Ир булмай ҙа ата балаһы".*

(Халыҡ йыры).

Шундай көҙрәте киң тәбиғәттең –
Йомарт яуа ҡары, бураны.
Йырып үтер хәл юҡ урамдарҙы –
Ҡар диңгеҙе баҫты донъяны.

Ҡыш батшаһы итеп тойған ғинуар
Үҙ шарттарын ҡуя ғәләмгә.
Өс көн тоташ яуған ҡар бураны
Ҡаты һынау булды әҙәмгә.

Тәбиғәттең миҙгелдәре бик күп,
Һәр берәһе матур үҙенсә.

Ҡайһы ваҡыт ел-дауыл да сыға,
Гел генә бит булмай беҙҙеңсә.

Үпкәләмйексе тәбиғәткә,
Күп тә үтмәҫ, шаулап яҙ килер.
Йәшәү көсө биреп үләндәргә
Болондарҙа һыуҙар эркелер.



## ҮҘГӘРӘ ЛӘ ИКӘН ЗАМАНА

Магазиндар буйлап теҙелгән саҡ
Була ине оҙон сираттар.
Бөгөн һөтһеҙ ҡалмайыҡ тип,
Сыға инек таңдан сиратҡа.

Бына шулай оҙаҡ йәшәнек беҙ
Таңғы йоҡобоҙҙо ҡалдырып.
Ҡар-буранлы иргәләрҙә тороп
Көтә инек сират зарығып.

Перестройка тигән осор килгәс
Үҙгәреп тә китте донъялар.



Инде хәҙер алыусылар түгел,
Һатыусылар сират торалар.

Магазиндар менән бер йәнәштә
Сиған табырымы тиерһең:
Бер-берeһен бүлеп маҡтанышып,
Сауҙагәрҙәр һата әйберен.

Ирекле сауҙа ҡоторған мәлдә
Һатыусылар икән бихисап.
Күп тауарҙар һатылмайса ята –
Уларҙың бит хаҡы бик ҡиммәт.

## ҠӘНӘҒӘТМЕН ЯҘМЫШЫМДАН

Мең дә туғыҙ йөҙ ун икенсе йыл
Тыуғанмын был яҡты донъяға.
Бөгөн бына туҡһан ике һуҡты,
Ғүмер бирҙе – рәхмәт Аллаға.

Йәшәр өсөн генә йәшәүҙе мин
Һис тә оло маҡсат итмәнем.
Кеше булып ҡалыу бурысымды
Ғүмерем буйы теүәл үтәнем.

Ике донъя һуғышы үткәрҙем,
Ҡаным түгеп илем һаҡланым.
Ил тереге булыр яугир исемен
Аҡ намыҫым менән аҡланым.

Ауырлыҡтар күрҙем, әммә түҙҙем,
Булды нахаҡ һүҙҙәр йотҡаным.
Дөрөҫлөктө тура ҡарап әйттем,
Һис бер кемгә асыу тотманым.

Ҡылған эштәр менән маҡтанмайым,
Баһа бирһен әйҙә йәмәғәт.
Мин ризамын ерҙә йәшәүемә,
Яҙмышымдан ҡалам ҡәнәғәт.

## ШИҒРИӘТКӘ ҒАШИҠ ТӘНЗИЛӘГӘ

Әсәң һабырлығын өлгө итеп,
Булдың һәр саҡ һабыр һәм тырыш.
Уңғандарҙы бәхет урап үтмәй,
Ыңғай килеп тора гел уңыш.

Уҡыуыңда ла гел алдын булдың,
Шиғриәтте янып яраттың.



Күңел биләр шиғырҙарың менән
Тыңлаштәрең үҙеңә ҡараттың.

Күңелеңә рухи аҙыҡ һинең
Шиғырҙарың – ижад емешең.
Тормош-йәшәйешкә һөйөү менән,
Ихлас башҡараһың һәр эшең.

Башҡаларға үрнәк тормош юлың,
Үпкә юҡтыр һинең яҙмышҡа.
Үҙең кеүек шиғриәткә ғашиҡ
Ҡыҙың үҫеп килә алмашҡа.

Ижад тауҙарына үрләгәндә
Гел ҡояшлы булһын юлдарың.
Үткәндәрең ҡыуанысլы булды,
Матур үтһен ҡалған көндәрең.

## КЕШЕЛӘРГӘ БӘХЕТ ӨЛӘШӘ

Бөтә донъя ғилем ғәләмендә
Балҡый бик күп яҡты йондоҙҙар.
Шулар араһында яҡташыбыҙ
Доктор Марат Аҙнабаев бар.

Тыуған ауылы уның Яҡшымбәт –
Данлы ырыу нәҫеле төбәге.
Яҡшы өмбәттән сыҡҡан академик –
Илебеҙҙең ғилми терәге.

Һуҡырҙарҙың күҙен асып ул бит
Бик күптәргә бәхет өләшә.
Аҡыл, һәләт менән таң ҡалырлыҡ
Ғилми уңыштарға өлгәшә.

## АУЫЛЫМ ИҪЕМӘ ТӨШКӘНДӘ...

Һағынамын, ауылым, һине
Ҡаршы тауҙарың менән.
Һиндә үткән көндәремдең
Нурлы таңдары менән.



Ауылымды күркәм итә
Шаулаған ҡайындары.
Шул ҡайындар иҫемә төшһә,
Артыла һағыштарым.

Тормош еле ҡайҙа ташлаһа ла,
Яҙмыш ҡушҡанынса атланым,



Утлы юлдар үттем фронттарҙа,
Ауылыма һөйөү һаҡланым.

Ҡаран гелән йөрәгем түрендә,
Ул үҙ яғына мине саҡыра,
Әммә тормош, йәшәү хәстәрҙәре
Форсат бирмәй бик тиҙ ҡайтырға.

## ҠАРАНЫМ

Һәр саҡ күңелем түрендә
Ҡарандың ҡайындары.
Ҡайындарым ҡайтып күрһәм,
Юғала ҡайғыларым.

Аҡ ҡайындар моңло шаулай
Яҙғы елдәр иҫкәндә.
Йүгереп ҡайтырҙай буламын
Ауылым иҫемә төшкәндә.

Ҡайынлыҡтың аҡланында
Ҡыҙарып еләк бешә,
Иртә торһам, кис ятһам да,
Ҡараным иҫемә төшә.

# ҠАРАНЫМ ҠАЙЫНДАРЫ



Яратам мин ҡайындарҙы,
Һоҡланам буйҙарына.
Тыуған яғым ҡайындары
Һис сыҡмай уйҙарымдан.

Ҡайындарҙы маҡтап, данлап
Күпме йырҙар йырланған.
Аҡ ҡайындар ҡайтыуымды
Һағынып көтөп торғандар.

Аҡ ҡайындың сафлыҡ төҫө
Тартып тора үҙенә.
Булһа икән шундай сафлыҡ
Һәр кешенең күңелендә.

Ҡайынҡайым, матурҡайым,
Һиңә ҡарап һоҡланам,
Миндегең менән парланып
Һаулыҡ алыуыма ҡыуанам.



# СИХРИ ШИШМӘЛӘР

Урғылып та сыҡҡан сал шишмәләр
Мәңге шулай сылтырап аҡкандар.
Сихри көстәре менән улар бит
Кешеләрҙе үҙенә тартҡандар.

Ауылдаштарым минең ҡасандыр
Дим ярында ғүмер иткәндәр.
Шишмәләрҙе, урмандарҙы һөйөп,
Ошо йәмле ергә күскәндәр.

Шишмәләрҙең береһе элек-электән
Туҡмаҡ Ҡаран тиеп аталған,
Һәм шуға ла олатайҙар Яңы ауылды
Ҡаран-Ҡунҡаҫ тип атаған.

Сылтырап аҡкан һыу буйҙары
Була ул ғашиҡтар төйәге.
Шунда ҡабына, дәртле яна
Йәш елкенсәктәрҙең йөрәге.

Икенсе шишмәһе Ҡарандың
Ҡойотауы аҫтынан урғыла.

Икеһе лә Дим яғына ағалар һәм
Юлдарында улар бергә ҡушыла.

Тыуған ауылыма ҡайтҡан һайын
Шишмәләргә ашҡынып барамын.
Шул шишмәләр һыуын бер
уртлаһам,
Йәшәүемә илһам аламын.

## ҠУРАЙ ЕЛӘГЕ МЕНӘН БАЛАН

Еләк әйтә:

Тәмлеләрҙән тәмле мин,
Шәрбәтлемен, баллымын.
Ауыҙҙа ирерлек тәмде
Ҡояш нурҙарынан алам мин.

Йәйҙең матур көндәрендә
Өлгөртәмен емешемде:
Мине үрсетеүселәргә
Тиҙ күрһәтәмен эшемде.



Бына шулай һәр йыл һайын
Тәмле ризыҡ бирәм бәндәгә,
Булышам мин кешеләргә
Тәм-том ашап рәхәт йәшәргә.

Балан әйтә:

Маҡтанмайым тәмлемен тип,
Әсе балан тигән даным бар.
Көҙөн ҡыҙарып бешәм,
ҡырауға ла түҙәм,
Хатта яуғанда ла ап-аҡ ҡар.

Урмандарҙы йәмләндереп сәскә атам,
Алам кешеләрҙең күҙ яуын,
Күп ишетәм моңло бәндәләрҙең
Мине маҡтап, данлап йырлауын.

Мин, әлбиттә, бешкән еләк кеүек
Шәрбәт бирер емеш түгелмен.
Әммә татлы ғына ғүмер итеү
Тормошта берҙән-бер ләззәт
түгел бит.

Донъя көтөү ай-һай еңел түгел,
Юлында әсе ел, бурандар күп була.
Ауырлыҡтарҙы көрәштә
еңеп сыҡһаң,
Шунда ғүмер йәмле, зауыҡ була.

## ЯРАТАМ ҠАРЛЫ УРМАНДЫ

Ҡышын урман ята тынлыҡта,
Ап-аҡ ҡарҙар яуа, саф һауа.
Шул һауаны иҫнәп уртлауҙары
Талған йәнгә була ҙур дауа.

Яратам мин ҡышҡы урмандарҙы,
Ағастарға ҡарҙар ҡунғанын.
Ҡыш иркәләй шулай ялан-ҡырҙы,
Өҫтәренә ябып юрғанын.

Тәбиғәттең һәр миҙгеле – бүләк,
Саф һауаһы дауа һаулыҡҡа.
Булһын ине донъяға именлек
Тыныс йәшәү өсөн халыҡҡа.



Беҙ бит – тәбиғәттең балалары,
Төшөнәйек уның серҙәренә.
Йәшәйештең ҡанундарын аңлап,
Моң өҫтәйек уның көйҙәренә.

Тәбиғәт – ул йәшәү сығанағы,
Уның байлыҡтарын һаҡлайыҡ.
Тәбиғәттең ҡанундарын
хөрмәтләйек,
Йолаларҙан ситтә ҡалмайыҡ.

## ТУҒАН ҠАЛАМ

Атайым да минең, әсәйем дә
Төрлө яҡта тыуып үҫкәндәр.
Бабай төҙөлөшөнә килгәндәр ҙә
Бер-береһен яҡын иткәндәр.

Атайым Борай яҡтарынан килгән,
Шахтер булып күмер сығарған.
Әсәйем йәмле Иҙел буйынан,
Төҙөлөш эштәрендә дан алған.

Күмертауым – гүзәл ҡалам минең,
Һиндә атай-әсәй танышҡан.
Йәшлек мөхәббәткә тоғро булып,
Ғүмерлеккә улар ҡауышҡан.

Йәшлегендә килеп Күмертауға,
Бик яратҡан уны атайым.
Ә ул ҡала минең өсөн хәҙер
Булып ҡалды кесе Ватаным.

Һин үҫкәнһең, ҡалам, ә мин һине
Һөйөүсе бер улың булғанмын.
Шуға ла бит ошо Күмертауҙа
Мәңгелеккә тороп ҡалғанмын.

Ҡалабыҙҙың матур урамдарын
Көн дә йөрөп килә буйлағым.
Туған ҡалам, һинең гүзәллегең
Данлап йырҙар килә йырлағым.





# АҠ ЯУЛЫҒЫМ

Ҡартлыҡта ла йәшәү йәмле,
Әгәр булһа һаулығың,
Һәм эргәңдә дәрт биреүсе
Мөләйем «аҡ яулығың».

«Аҡ яулыҡҡа» ҡарап алһам,
Күңелдәрем йәшәрә.
«Ҡартҡайым» тип бер йылмайһа,
Дәртем арта йәшәүгә.

Беҙҙең йәшебеҙ араһы –
Ҙур айырма, тиң түгел.
Йөрәктәр берҙәй типкәстен,
Ҡауышты бит пар күңел.

«Аҡ яулығым» бигерәк уңған,
Тырышып донъя көтә.
Ҡартлыҡ көндә йәш мөхәббәт –
Беҙгә бына шул етә.

Ап-аҡ ҡына, йомшаҡ ҡына
«Аҡ яулығым» ҡулдары.
Бәхетемә оҙон булһын
Беҙҙең ғүмер юлдары.



## УРАҘА БАЙРАМЫ

Рамаҙан уртаһы. Күңелемдә
Изге иман нуры балҡыны.
Изге теләк менән ураҙа тотабыҙ,
Ихлас биреп йөрәк ялҡынын.

Сәләмәтлек, ҡәнәғәтлек менән
Дини бурысыбыҙҙы үтәйбеҙ.
Аллаһы Тәғәләнең ризалығын алғас,
Күңелебеҙ саф, яҡты йөҙөбөҙ.

Беҙ, бәндәләр, тыумағанбыҙ
Тик рәхәтлек өсөн донъяға.
Ә тыуғанбыҙ изгелектәр эшләп
Йәшәү өсөн фани донъяла.

Төрлө динле төрлө милләттәр күп
Йомарт Башҡортостан ерендә.
Бар милләттәр бер туғандай йәшәй
Бары беҙҙең башҡорт илендә.

Динебеҙҙе тағы ла үҫтерәйек,
Юғалтмайыҡ бөгөн булғанын.
Дингә хөрмәт, изге уйҙар менән
Ҡаршылайыҡ Ураҙа байрамын!



## ХӘЙҘӘР ХӘЛӘФ УЛЫНА
(«Ҡаран» кооперативы рәйесе)

Өҙөлөп һөйҙөң Ҡаран буйҙарын,
Зәм-зәм тиеп эстең һыуҙарын.
Шуға ла һин булдың Ер улы,
Ергә арнаның ғүмер юлдарың.

Тыуған ауылыңа, туған ергә
Көсөң һалдың ғүмер буйына.
Халҡыңды мул йәшәтеү хыялы
Һис сыҡманы һинең уйыңдан.



Халыҡ һине үҙе етәксе итте,
Ир-егеттең һайлап уңғанын.
Вазифаңа шундай тап килгәнһең,
Ысын хужа һин, Хәйҙәр туғаным!

Ҡаран ере – күкрәп үҫкән иген,
Көр мал-тыуар булған төбәк ул.
Ошо байлыҡтарҙы арттырыуҙа
Үҙ халҡыңа ныҡлы терәк бул.

Хәйҙәр Хәләф улы! Изге эштәр
Ҡылып халҡыңа тоғро ҡалаһың.
Килер быуындар ҙа данлап һөйләр
Һине - ир-уҙаман балаһын.

## ЙӘЛ, БИК ЙӘЛ...

Башҡортостаныбыҙҙың арҙаҡлы
патриот-шағиры Рәми Ғәриповтың
моңло-зарлы шиғырҙарын уҡығас.

Магазинда бер йәш һылыуҡайға
Күҙем төштө ҡапыл бер ваҡыт.
Мин генәме, уға ғашиҡ булды
Магазинға ингән бар халыҡ.

Әҙәплелек һәм дә яғымлылыҡ
Балҡып тора уның йөҙөндә.
Һоҡланмайса һис кем ҡала алмаҫ
Уның балдай татлы һүҙенә.

Иғтибарын йәлеп итмәк булып
Өндәшкәйнем уға башҡортса,
Яуап бирҙе миңә бик яғымлы:
«Әйтегеҙсе, зинһар, урыҫса».

Ниндәй аяныслы: был һылыуҡай
Битараф икән әсә теленә,
Сөнки уның менән тик урыҫса
Һөйләшкәндәр йәштән гел генә.

Был ҡыҙғаныс хәлгә йөрәк әрней,
Был түгелме телебеҙҙе һатыу.
Теле юҡтың иле лә юҡ, тиҙәр,
Булмаһын илебеҙҙе юғалтыу.

## ИКЕ ЙӨҘЛӨ КЕШЕ

Ике йөҙлө кеше күҙ алдында
Һине шундай маҡтай, «ярата».



Ә артында әллә ниндәй яҙыҡ
Һүҙҙәр һәйләр һиңә ҡарата.

Күҙен дә ул йоммай һине алдай.
Юҡты һөйләү – уның ғәҙәте.
Үҙен күрмәһәң дә ишетәһең -
Алдан йөрөй уның ғәйбәте.

Берсә маҡтап, берсә яла яғып
Донъя болғата уның ишеләр.
Ә бит уның ғәйбәт-ағыуынан
Ағыулана бара кешеләр.

## ҮҘҺҮҘЛЕЛЕК ҺӘМ БЕР ҺҮҘЛЕЛЕК

Бер һүҙлелек менән үҙһүҙлелек
Оҡшаш кеүек тәүге ҡарауға.
Әммә айырмалар бик ҙур бында,
Аҡыл кәрәк уны аңларға.

Бер һүҙленең вәғәҙәһе - иман,
Уйын яҡшылыҡҡа ниәтләй.

Һүҙендә ныҡ тора, кешеләрҙе
Гелән изгелеккә етәкләй.

Ә үҙһүҙле, тиҫкәреләр һис бер
Ҡолаҡ һалмаҫ кәңәш, аҡылға.
Башҡаларҙы тыңлап аңлай белмәҫ,
Тик үҙ һүҙенә ул табына.

Шулай тик үҙ ҡабығында йәшәү
Күпме йылдар уны яфалай.
Ниҙән килә уға ғазап-бәлә,
Шуны бит ул үҙе аңламай.

Аңһыҙ үҙһүҙлелек - мәғәнәһеҙлек
Күпме ғаиләне тарҡата.
Ундай аҡылһыҙлыҡты бөтөрһәк,
Булмаҫ ине, бәлки, күп хата.

Насар холоҡ тиҙ ғәҙәткә керә,
Бәхетһеҙлек килә кешегә.
Бәлә-ҡаза юҡтан ғына килмәй,
Килә һинең хата эшеңдән.



## ҠӘЛӘМДӘШ ДУҪҠА
(Эдуард Таһировҡа)

Шиғри юлдар оло журналистың
Ихлас күңеленән әйтелгән:
– Дуҫым аҡылы менән күптәрҙең бит
Ҙур эштәре бәйән ителгән.

Журналист булып тыумай ул кеше,
Был «сир» йоға юлдар уҙғанда,
Тәүге тапҡыр гәзит уҡығанда,
Беренсе хәбәрҙәрен яҙғанда.

ВУЗ-да уҡыу йылдарыңда уҡ һин
Фәлсәфәне үтә яраттың.
Эстәлекле мәҡәлдәрең менән
Кешеләрҙе үҙеңә ҡараттың.

Яратҡан эш ялыҡтырмай, тиҙәр,
Ғүмереңде мөхәррир эшенә арнаның.
Бик күп журналистар үҫтерҙең һин,
Күптәрҙе ҙур ижадҡа арбаның.



## МАЛ ЙӘНЛЕ КЕШЕ

(Һауынсы Ш. Вахитовҡа арнала)

Ялсыгҡайҙың яландары иркен,
Тауҙарында үҫә аҡ ҡылған.
Тырышлығы менән ҙур дан алды
Шәүәли ҙә тигән уҙаман.

Тау буйҡайҙары һай бүтәгә,
Ат тояҡҡайҙарын күтәрә.
Герой тигән быңдай оло хөрмәт
Тәтемәй шул әле күптәргә.

Тубылғы ла ағас ҙур булмай,
Тубылғы ла аша юл уҙмай.
Халҡы өсөн хәләл көсөн түккән
Ир-уҙаман һис тә хур булмай.

Ялсыгҡайҙың бейек Ҡыҙыл тауы
Алыҫтарҙан ята күренеп.
Хеҙмәт күрһәтмәйсә оло данды
Алып булмай шул ул үрелеп.



Шәүәли ҙә тигән йылғыр малай
Алты йәштә атҡа атланған.
Ун йәшендә аттар сабышында
Барыһын уҙып беренселекте алған.

Шәүәлиҙең уңыштарын күреп,
Атай –Мөхәмәт ихлас ҡыуана:
–Улым, һиңә фатихам шул, тигән,
Алдынғы булып йәшә донъяла.

Ялсыгҡайҙа Вахитовтарҙы бит
Мал йәнле кешеләр тип атайҙар.
Тырыш, уңған булғандары өсөн
Уларҙы лайыҡлы маҡтайҙар.

Ғәтиә Вахитова 15 йәштән
Һауынсы булырға яраған.
Ә энеһе, тырыш Шәүәли,
Быҙауҙар, башмаҡтар ҡараған.

Уңыштары өсөн Ғәтиәне
Партия дан-хөрмәткә күтәрә –
Баш ҡалабыҙ Мәскәүгә съезд
Делегаты итеп ебәрә.

Апаһы Ғәтиәнең данлы эшен
Шәүәли тырышып дауам итә,
Һәм алты мең литр һауым алыу
Уңышына ул барып етә.

Көндө, төндө белмәй эшләне ул,
Йәлләмәне йөрәк ялҡынын.
Һәм шуға ла уның күкрәгендә
«Алтын йондоҙ» ордены балҡыны.

Һауынсының данлы хеҙмәтендә
Атаһы уға маяҡ булған.
103 йәшәр Мөхәмәт уҙаман
Шәүәли улынан бик уңған.

Герой Шәүәли тормош йәшәүендә
Тағы ла бер оло дан алды:
Бынамын тигән биш ул үҫтереп,
Яҡшы нәҫел-ырыу ҡалдырҙы.





# АТАЙЫМДЫҢ ҺАҒЫШЛЫ ЙЫРҘАРЫ

Ерәнсәкәй менән көрәнсәкәйҙең
Тау буйҡайҙарында төйәкәйе.
Уттарҙа ла янмай, һыуға батмай
Аҫыл иркәйҙәрҙең һөйәккәйе.

Оло юлдан үткән карауандың
Һауаларға оса шул туҙаны.
Дуҫтар йыйылышып ултырғанда
Һиҙелмәй ҙә ғүмерҙәр уҙғаны.

Саптар атым бар сағында
Сабып мендем сағылға.
Дошмандарға сер бирмәнем
Башым иҫән сағымда.

Яҡшы аттар арҡанда,
Уңған ирҙәр тарханда.
Бәхет кәрәк, тәүфиҡ кәрәк
Ҡайһы илдәргә барһаң да.



## «ЮЛДАШ» КАНАЛЫНА МӘДХИӘ

Күңелдәргә шатлыҡтар бөркөлә
«Юлдаш» каналын тыңлаһам.
Радио аша сәләмләшеп йәшәйбеҙ –
Килде бит беҙгә шәп замана.



Республикабыҙ үҙәге – Өфө
Бөтә ғәләм менән һөйләшә.
Алыҫ араларҙы яҡынайтып,
Һәр кем үҙ туғаны менән серләшә.

«Юлдаш» тулҡындары буйлап
Башҡорт йыр-моңдары тарала.
Уның маҡсат-теләктәре изге:
Йәшәһен дуҫлыҡ беҙҙең арала.

Ғорурланам «Юлдаш» каналы өсөн,
Ул бит – башҡорт күңеле емеше,
Тулҡындары сәләмдәр еткерә,
Алыҫтарҙан һөйләшә һәр кеше.



Башҡортостан дуҫлыҡ иле,
«Юлдаш» та ул асыҡ сағыла.
Нисек ҡыуанмаҫһың инде быға –
Тәүлек буйы йыр-моң ағыла.

«Юлдаш» аша өйрәнәбеҙ
Шанлы тормош һабағын.
Зауыҡланып ҡабул итәбеҙ беҙ
Атай-бабайҙарҙың изге йолаһын.

Рәхмәт һиңә, «Юлдаш» –
серҙәш дуҫҡай,
Изге теләк, кәңәштәрең өсөн.
Донъя матурлығын данлауыңа,
Кешеләргә йәшәү дәрте
биргәнең өсөн.

## ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ

Тормош һабаҡтары ай-һай ауыр,
Күтәреү өсөн күп көс кәрәк.
Бала саҡтан тырыш, зирәк булһаң,
Булырһың үҙ-үҙеңә терәк.

Нисек дөрөҫ йәшәргә донъяла?
Шул турала уйланып ҡара.
Йәшәү ҡатмарлыҡтарын өйрәнеп,
Үткән юлыңа бер әйләнеп ҡара.

Еңеллекте генә эҙләмә һин,
Ауырын да еңел эшләй бел!
Ауырлыҡтарҙы еңә алыуыңдан
Бәхет, ләззәт табып йәшәй бел...

Тормош һабаҡтарын дөрөҫ аңла,
Аңламаһаң – ул һине уҡыта.
Тик ҡыйыуҙар уны еңеп сыға,
Йомшаҡтарҙы «саға», ҡурҡыта.

Тормош һабаҡтарын өйрәнгәндә
Намыҫыңды һис тә юғалтма.
Был донъяла ысын кеше булып
Йәшәргә тыуыуыңды онотма!



## УҢЫШЛЫҠ СЕРЕ

*(Рәмил Мостафинға)*

Көньяҡ Уралдың киң далаһында
Йәйрәп ята иген баҫыуҙары.
Йылдың-йылы мул уңыш үҫтерә
“Искра” хужалығы батырҙары.

Арҙаҡлы ир-уҙаманы һин халҡыңдың,
Ай-һай ҙур йөк тартып бараһың.
Ауылың Яҡшымбәтте күтәреүгә
Бөтә ғүмереңде арнаның.

Яҡшымбәттәрҙең уңыштары сере –
Эшсәндәрҙең берҙәм көсөндә.
Һәм дә рәйес Мостафиндың оҫта
Етәкселек итеү эшендә.

## ҠЫУАНЫС

Ыласын кеүек кәйелеп,
Тимер ҡоштар осалар.

Бейек-бейеккә ашалар,
Болоттарҙы ҡосалар.

Башҡорт ерендә яралған
Әллә күпме вертолет.
Оса улар күп илдәрҙә
Донъя күген әйләнеп.

Башҡортостан һәм Рәсәйҙең
Хәҙер бик күп дуҫтары.
Ул дуҫлыҡҡа ярҙам итте
Күмертау осҡостары.

Күкте байҡай яңы осҡос –
Бөгөн бик ҙур ҡыуаныс.
Ҡалабыҙ данын таратыр –
Уның юлы бик алыҫ.

Оса күктә вертолеттар –
Тырыш хеҙмәт емеше,
Илебеҙ иҡтисадында
Күмертауҙар өлөшө.



## ТЕШ ДАУАЛАУСЫ ФАЯГӨЛГӘ

Ҡулың оҫта,шуға һиңә
Мең-мең рәхмәттәр яуа.
Һинең мөләйем ҡарашың
Үҙе бит сиргә дауа.

Һыҙланғандарҙы дауалау –
Бала саҡтан хыялың.
Ҡулдарыңдың шифалығын
Мин үҙемдә тоямын.

Аҡ халатың, аҡ ҡалпағың
Бигерәк килешә үҙеңә.
Изге күңелле булыуың
Сыҡҡан хатта йөҙөңә.

Исемдәрең шундай матур –
Кем генә ҡушҡан икән?
Һиндәй табип менән беҙҙең
Ҡалабыҙ отҡан икән.

## ЯҢЫ ЙЫЛ ТЕЛӘКТӘРЕ

Ҡыш бабай түгелмен инде –
Юҡ шуға бүләктәрем.
Ҡолаҡ һалығыҙ, еткерәм
Яңы йыл теләктәрем:

Ҡаршылайыҡ яңы йылды
Изге уй-теләк менән.
Шул теләктәр үтәлһен тип,
Эшләйексе дәрт менән.

Намыҫ ҡушҡанса йәшәйек,
Алғы сафта атлайыҡ.
Ялҡау, эскеселәр беҙҙең
Ишектәрҙе ҡаҡмаһын.

Төрлө һуғыш суҡмарҙары
Ҡалһын тарихта ғына.
Имен ҡайтһындар һалдаттар
Азат туған яғына.

Баҫыу-яландар тулышһын
Туҡ башаҡлы игенгә.



Ҡыуаныстар ғына килһен
Яңы йылда илемә.



Ҡабул булһын теләктәрем –
Саф ниәт-доға ҡылам.
Төклө аяғың менән кил,
Яңы йыл атлы олан!

## УҢҒАН ЕТӘКСЕ

*Бейек кенә тауҙың һай башында*
*Ат аунаған төрлө ерҙәр бар.*
*Ирҙәр менән ирҙәр бер тиң түгел –*
*Береһе бишкә торған ирҙәр бар.*

(Башҡорт халыҡ йыры).

Ҙур хужалыҡты бит етәкләүгә
Камил аҡыл, ҡаты ҡул кәрәк.
Һинең бөтә тырышлығың, Әсхәт,
Халҡың бәхетенә ҙур терәк.

Атайың Шәйхетдинды беләм,
Ишеткәнем дә бар тауышын,

Бригадала тәртип булһын өсөн
Кешеләрҙе дөрөҫ ҡушыуын.

Һинең атайың да ғүмер буйы
Колхозым тип янып йәшәне.
Йәлләмәне көсөн дөйөм эшкә,
Яҡшы өлгө булып эшләне.

Ошо данлы эстафета хәҙер,
Әсхәт туған, һинең ҡулыңда.
Атайыңдың данын ҡабатлайһың,–
Бәхет юлдаш булһын юлыңда.

Ауыл эшсәндәре бәхете өсөн
Үтә ауыр бурыс тартаһың,
Ҡуҙғаттың бит йөктө урынынан,
Хәҙер инде алға бараһың.

Аҡыл көсөң һине ташламаһын,
Шатлыҡ балҡыһын гел йөҙөңдә.
Артабан да эшең уңай барһын,
Хоҙай бирһен һаулыҡ үҙеңә!



## АҪАЛЫ БАЛАҪ

Стенала күркәм аҫалы балаҫ –
Оҫта һөнәрмәндәр емеше.
Атап, маҡтап әйткәндә ул – Зөһрә
Апайымдың алтын ҡул эше.

Сағыу биҙәктәргә ҡарайһың да
Күҙең ала алмай тораһың.
Магнитмы ни – үҙенә ул тарта,
Матурлыҡҡа хайран булаһың.

Балаҫтарҙа бөтә тәбиғәттең
Матурлығын гөппән күргәндәр.
Биҙәктәре менән йорт түрҙәрен
Таң ҡалырлыҡ гүзәл иткәндәр.

Аҫалы балаҫтар һуғыуға апайым
Кесе йәштән үк ныҡ бирелгән.
Ауылымдың уңған килендәре
Унан ошо һөнәргә өйрәнгән.

Аҫалы ла балаҫ күргән мәлдә
Иҫтәремә төшә баласаҡ,
Улар Ҡаран ауылы өйҙәрендә
Апайым иҫтәлеге булып ҡаласаҡ.

*Август, 2001.*

## КҮМЕРТАУ СӘСКӘЛӘРЕ

Яратамын ҡалам урамында
Әкрен генә атлап йөрөргә.
Ҡалабыҙ йәмләнә, ашығамын
Уның матурлығын күрергә.

Замандаштар менән осрашыуы –
Үҙе бер зауыҡ, күңел балҡышы.
Бер-беребеҙҙең хәлен белеү – фарыз,
Сәләмәт йәшәү өсөн фекер алышыу.

Урамдарҙа күп сабый балалар,
Улар бит – тормош сәскәләре.
Буласаҡ граждандар өсөн
ғорур атлай
Балаларҙың һөйөклө әсәләре.

Күмертауҙың матур сәскәләре –
Атай-әсәйҙәрҙең емеше.
Һәр саҡ шулай ҡабатланып барһын
Ҡалабыҙҙың данлы үсеше.



Күмертауҙың тәбиғәте уңай
Ышаныслы быуын үҫтерергә.
Ҡалабыҙҙа ай һайын ашыға
30 бала яҡты донъя күрергә.

## ОЛО ҠЫУАНЫС

Көйөргәҙе яугирҙары фронттарҙа
Башҡорт батырлығы
менән һуғышҡан.
Шулар араһында бер ауылдан өсәү –
Ғәфиәт, Хәсән, Сәлмән
геройҙар булған.

Көйөргәҙе батырҙары хаҡында
Хәтер китабымды сығарҙым.
Шуның өсөн күп ветерандарҙан,
Замандаштарҙан рәхмәт алдым.

Көйөргәҙе халҡына мөһим хәбәр:
Башҡортса гәзит сығыу –
оло ҡыуаныс.
Үҙ телеңдә яңы гәзит уҡыу –
Халҡыбыҙ өсөн үҙе бер йыуаныс.

Яңы гәзитте ҡайнар ҡотлайбыҙ,
Булһын ине исеме «Юшатыр».
Башҡорт йырында әйтелгәнсә,
Яңы хәбәрҙәр күңелебеҙҙе йыуатыр.

## КӨЙӨРГӘҘЕ ЙОНДОҘО

(Әхәт Ҡотлоәхмәтовҡа)

Көйөргәҙе районы күгендә
Яҡты йондоҙ булып күрендең.
Баласаҡтан булдың кешелекле,
Гелән изгелеккә өйрәндең.

Шаулы заман тулҡындары һине
Үтә оло эшкә күтәрҙе.
Халыҡ менән әүҙем аралашып
Районды һин алға этәрҙең.

Бөйөк бурыстарҙы үтәү өсөн
Ваҡыт иҫәпләшмәй эшләнең.
Үҙең өсөн түгел, игенселәр
Бәхете менән һин бит йәшәнең.



Көйөргәҙе тәбиғәте өсөн
Ҡыҙғанманың дәртең, дарманың
Халҡың өсөн йәшәү – ҙур батырлыҡ,
Быны һин бит яҡшы аңланың.

Һин бит маҡтау исеме өсөн түгел,
Яҡташтарың өсөн тырыштың.
Батыр эштәреңдең дауамдары
Артабан да булһын уңышлы.

## КӨЙӨРГӘҘЕ – БАТЫРҘАР ЯҒЫ

Тарих биттәренә күҙ һалайыҡ,
Оло көрәш юлдарын ҡарайыҡ.
Ирекле яулап алышҡан ир-уҙаман,
Батырҙарыбыҙҙы иҫкә алайыҡ.

Башҡорт тарихы йондоҙо
Кинйә Арыҫланов
Көйөргәҙе буйында ғүмер кисергән.
Алпауыттар иҙеүенән ҡотолоу өсөн
Ул халыҡты оло көрәшкә күтәргән.

Кинйә ырыуынан Хәйҙәр Арыҫланов
Батша генералы исемен яулаған.
Атлы ғәскәрҙәргә командалыҡ итеп,
Башҡорт батырлығын данлаған.

Ватан һуғышына
Көйөргәҙе яҡтарынан
11 меңләп ир-егеттәр фронтҡа китә.
Замандаштарыбыҙ оҙон утлы юл үтә,
Күп меңләгән фашистарҙы юҡ итә.

Яуыҙ дошманды дөмөктөрөү өсөн
Күп яҡташтарыбыҙ ғүмер
фиҙа ҡалған.

Батырлыҡтары өсөн уларҙың 5200-е
Орден, миҙалдарға лайыҡ булған.

Сикһеҙ ҡаһарманлыҡтары
өсөн беҙҙең
Районның 7 ир-уҙаманы
Герой исеме ала.
Ә бер төбәктә өс ҡаһарман үҫтергән
Кинйә ауылы бөтә Рәсәйҙә
дан ҡаҙана.



Көйөргәҙелә тыныс тормошта ла
Хеҙмәт батырҙары булды күп.
Шәүәли Мөхәммәт улы Вахитов
Хеҙмәт Геройы исеме алды бит.

Халыҡ үҙ геройҙарын онотмай,
Тантаналарҙа йыш иҫкә ала.
Улар тураһындағы иҫтәлектәр
Кинйә музейында һаҡлана.

## ҺАҒЫНАМ ДИМ БУЙҘАРЫН

Иртән генә тороп бер ҡараһам,
Йәйрәп ята йәмле Дим буйы.
Унын матурлығы, хоҙурлығы
Күҙ алдымда ғүмерем буйы.

Дим бит ул дала яғы йылғаһы,
Талғын ғына унын ағышы.
Ҡайҙа йөрөһәм дә үҙенә тарта
Дим йылғаһы буйҙары һағышы.

Күрәһем килә ҡайтып Димкәйемдең
Иртә яҙҙа шаулап ташҡанын,

Нарыҫ тау менән «ҡулағы»
араһы үҙәнендә
Дингеҙ һымаҡ йәйелеп ятҡанын.

Алтынға тиң байлыҡтары
менән данлы
Дим буйының туғайҙары.
Шул йәннәттә кинәнеп йәшәгән
Асаба ла башҡорт ырыуҙары.

Мең ырыуы башҡорттары һәр саҡ
Ерен, һыуын, Димен батыр һаҡлаған.
Шуға ла бөтә Дим буйҙары буйлап
Тик башҡорт ауылдары урын алған.

## ШУЛАЙ ЫШАНЫСЛЫ АТЛА

(Насырова Зиләгә)

Йәшел болондарҙа уйнап үҫә
Гөл-сәскәләй матур ҡыҙ Зилә.
Үҫә төшкәс тартыла ҡалаға –
Типографияға эшкә килә.



Тырыш тәбиғәтле ауыл ҡыҙы
Эшен һөйҙө, арыу белмәне.
Оҫталығын гел арттыра барып,
Уңыш тауҙарына үрләне.

Линотипты ныҡлы үҙләштерҙе,
Әммә компьютерға етәме.
Саф мөхәббәт ялҡынында яныу
Зиләне лә урап үтмәне.

Тормош бит ул: булды төрлө хәлдәр,
Әммә йөрөмәне моңайып.
Кешеләргә һәр саҡ ихлас булды,
Гел һөйләште көлөп, йылмайып.

Ғүмер юлдарыңда бул һин, Зилә,
Ышанысды баҫыр, көр атлар.
Үҙең кеүек сибәр, эшсән ҡыҙың
Һинең йәшлегеңде ҡабатлар.

## МОСТАФА БАБАЙҒА

Миәкә яҡтарында тыуғанһың,
Дим буйында уйнап үҫкәнһең.

Егет булғас, тыуған яҡтарынан
Был яҡтарға сығып киткәнһең.

Күмертауың һине ҡаршы алған,
Ҡауыштырған һөйгән йәреңә,
Эштәреңдә уңыш ҡаҙандырған
Һәм әйләнгән туған ереңә.

Ә үҙең һуң тырышлығың менән
Күтәргәнһең ҡала гәзитен.
Унған ҡала халҡы ҡаҙаныштары
Биҙәгәндәр уның һәр битен.

Бармы икән беҙҙең ҡалабыҙҙа
Һине, бабай, танып белмәгән.
Ихтирамға лайыҡлыһың һин бөгөн,
Рухтарҙа һин һаҡлан мәңгегә!

Миәкәләрҙә тыуып үҫһәң дә һин,
Күмертауың - туған төйәгең.
Ҡотло булһын, бабай, 90 йәшең,
Хоҙай насип итһен 100-ҙәрен!

Азат Хәлилов.



## ДҮРТ ЮЛЛЫҠТАР

Кешеләрҙе ихтирам ит йәшәүеңдә,
Гел әҙер бул ярҙам ҡулың һуҙырға.
Изгелекле һәм ипле бул,
эй мосолман,
Иманыбыҙ ҡушҡан изге булырға.

***

Сабырлыҡтың төбө алтын, тиҙәр,
Сабыр булмағандар – бахыр ул.
Ауырлыҡтар күп осрар юлыңда,
Уларҙы еңеү өсөн батыр бул.

***

Тыңлаусанлыҡ – бик тә яҡшы ғәҙәт,
Әммә үтә йыуаш булыу килешмәй.
Ҡайһы саҡта ғорур йәшәү өсөн
Аҡыллы уҫал булыу етешмәй.

***

Йәшәйештә ҡыйыулыҡ бик кәрәк,
Тәүәккәлләгән, тиҙәр, таш ярған.
Күләгәһенән ҡурҡып боҫоп ятҡан –
Үҙ бәхетенән мәхрүм ҡалған.

***

Ауыҙың бешмәһен өсөн өрөп ҡап,
Ете үлсәп бер киҫергә, тигәндәр.
Тормош тигәнең ай-һай ҡатмарлы,
Аҡыл кәрәк донъя көтөргә, тигәндәр.

***

Түбән ҡарап шөкөр ит тә,
Үргә ҡарап фекер ит, тигәндәр.
Әле мин үҙ көсөмдә йәшәйем,
Бар бит минән дә хөрт түбәндәр.

***

– Үргә ҡарап фекер ит – нимә ул?
– Ир-уҙаман бул, ынтыл үрҙәргә.
Һинең һалған хәләл хеҙмәттәрең
Дан килтерһен тыуған ерҙәргә.

***

Хәйләһеҙ донъя – файҙаһыҙ,
Тиҙәр ике йөҙлө ишеләр.
Ләкин уларҙың хәйләһенән тик
Зыян күрә ябай кешеләр.

***



Була бит ихлас ябай кешеләр –
Эсендәге-тышында.
Ләкин ул йүнһеҙ зат түгел,
Бик намыҫлы үҙенең эшендә.

***

Ашау өсөн йәшәмә һин,
Йәшәү өсөн кәрәк ашарға.
Йәшәйештең ҡәҙерен белһәң,
Кәрәк тәмәкене ташларға.

***

Ир бул, ер бул тормошта,
Кәпәренмә мин-мин тип,
Һис маҡтанма, хеҙмәт ит
Халҡым бәхете өсөн тип.

***

Кооператив – халыҡ өсөн крепость,
Уның көсө берҙәм эшләүҙә.
Йомарт ерҙән күберәк килем алып,
Мул тормошта рәхәтләнеп йәшәүҙә.

***

Эшме, һүҙме – ҡайһыһы яҡшыраҡ?
Эш – ул бәхеткә нигеҙ булып тора.

Ә буш һүҙ һөйләп йөрөгәндәр
Төп башына бик тиҙ ултыра.

***

Тырыштым мин кешеләргә
Тик яҡшылыҡ менән ярарға.
Тормошта бит яҡшы булыу өсөн
Кәрәк үткер телле булырға.

***

Урмандарҙа яратам мин
Ҡайындарҙың аҡлығын.
Һаҡларға ине туған илдә
Башҡорт милләте сафлығын.

***

Ҡатышмаһын ят быуындар ҡаны
Саф күңелле ихлас башҡортҡа.
Әйләнмәһен ине йәш быуын
Бер мәғәнәһеҙ маңҡортҡа.

***

Аҡыллылар – бәхәстә лә тыныс,
Нәфрәт бары ғауға ҡуптара.
Асыу сәсеп кәңәш ҡороп булмай,
Шул турала һин уйлап ҡара.



***

Етәксенең шундайы ла була;
Һәр сығышы – үҙен күрһәтеү.
Оҫта һөйләү – оҫта эшләү түгел,
Бары эштән генә ситләшеү.

***

Милләттәр ныҡлығы – бик тә яҡшы,
Әммә башҡортлығыңды юғалтма.
Дуҫлыҡ ныҡ булһын өсөн иң тәүҙә
Үҙең ныҡ булыу кәрәк –
шуны онотма!

***

Көнсөл үҙ ҡабығында йәшәр,
Һис бер яҡшылыҡ күрмәҫ.
Гелән даулашып йәшәүҙән
Донъя рәхәтен тоймаҫ.

***

Таш менән атҡанға ла
Аш менән ат, тигәндәр.
Шунда намыҫың өсөн һин
Булырһың ҡәнәғәт, тигәндәр.

***

Ваҡыт – аҡса, тип дөрөҫ әйткәндәр,
Ә етәксе өсөн ул – икеләтә,
Сөнки уға ваҡыт фәтүәһе –
Күберәк кешеләр менән эшләүҙә.

-43556
Городская ЦБ
г. Кумертау





## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

*Автор тураһында һүҙ* 3
*Гүзәл ҡалам – Күмертау* 15
*Башҡорттар – үҙенсәлекле халыҡ* 16
*Башҡорт ғорурлығын һаҡларбыҙ* 17
*Президентыбыҙ Рәхимовҡа* 18
*Башҡорт – ғорур халыҡ* 20
*Минең ғүмерем* 21
*Ныҡ булайыҡ* 22
*Ҡаһарман ауылдашым* 24
*Табибә Мөнирәгә* 25
*Күмертау һандуғасы* 27
*Имам-мөхтәсип Салауатҡа* 28
*Яңғыҙ ҡатынға* 30
*Залп* 31
*Ололарға дан, ихтирам* 32
*Зарланмайбыҙ яҙмышҡа* 34
*Ер-әсәбеҙ һаҡланы* 35
*Полкташым хаты* 36
*Туғаным – ҡоралдашым* 37
*Сафта ҡалам* 38

Яңы миҙал 39
Дим буйы егете 40
Һалдат һағышы 41
Ҡыуанам 43
Тамара Рәшит ҡыҙына 44
Башҡорт йыры 45
Өмөт 46
Күмертауым – ғүмер бишегем 47
Рәйсә Рәхмәт ҡыҙына 48
Табип Генадий Бабиковҡа 50
Атай һәм ул 51
Шағирә Зөбәржәткә 52
Ҡанатлы хыялдар 54
Ветерандар сафтарҙа 55
Өлкән йәштәгеләр көнө 56
Тәбиғәткә үпкәләмәйек 57
Үҙгәрә лә икән замана 58
Ҡәнәғәтмен яҙмышымдан 59
Шиғриәткә ғашиҡ Тәнзиләгә 60
Кешеләргә бәхет өләшә 61
Ауылым исемә төшкәндә 62
Ҡараным 63



Ҡараным ҡайындары 64
Сихри шишмәләр 65
Ҡурай еләге менән балан 66
Яратам ҡарлы урманды 68
Тыуған ҡалам 69
Аҡ яулығым 71
Ураҙа байрамы 73
Хәйҙәр Хәләф улына 74
Йәл, бик йәл 75
Ике йөҙлө кеше 76
Үҙһүҙлелек һәм бер һүҙлелек 77
Ҡәләмдәш дусҡа 79
Мал йәнле кеше 80
Атайымдың нағышлы йырҙары 83
«Юлдаш» каналына мәдхиә 84
Тормош һабаҡтары 85
Уңышлыҡ сере 87
Ҡыуаныс 87
Теш дауалаусы Фаягөлгә 89
Яңы йыл теләктәре 90
Уңған етәксе 91
Асалы балас 93

*Күмертау сәскәләре* 94
*Оло ҡыуаныс* 95
*Көйөргәҙе йондоҙо* 96
*Көйөргәҙе – батырҙар яғы* 97
*Һағынам Дим буйҙарын* 99
*Шулай ышаныслы атла* 100
*Мостафа бабайға (Азат Хәлилов)* 101
*Дүрт юллыҡтар* 103

*Литературно-художественное издание*

***СОЛТАНОВ***
***Мостафа Кәрим улы***

***Сафта ҡалам***
***(Остаюсь в строю)***
***(на башкирском языке)***

Шиғырҙар

***Мөхәррир, корректор – К. Абдуллин.***
***Йыйыусы – Г. Тазитдинова.***
***Тышлыҡ дизайн, биҙәү, йыйыу – З. Насырова.***

*Сдано в набор 11.05.2004 г* *З. № 2037.*
*Подписано в печать 10.11.2004 г.* *Тираж 155.*
*Формат 84х108 1/32.* *Усл.п.л. 1,4.*
*Бумага офсетная.* *Печать офсетная*
*Гарнитура Times Cur Bach Normal.*

**Лицензия на издательскую деятельность**
**Б 848356 выдано от 21.06.2000 г.**

**Отпечатано в ГУП РБ «КГТ»**
**г. Кумертау, ул. Гафури, 26.**

35 cc